*Фәниә СӨЛӘЙМӘНОВА*

# КҮҢЕЛДӘРЕ ТУЛЫ МОҢ

Башҡортостан радиоһының музыкаль тапшырыуҙар редакцияһында «Илһам» исеме менән эфирҙа яңғыраған тапшырыуҙар халыҡ күңелендә үҙ урынын тапты.

Был программаның әлеге көнгә иллеләгән геройы бар, тимәк, шунса моң эйәһенең яҙмалары эфирыбыҙҙы байытҡан, тыңлаусылар күңеленә барып еткән, тиҫтәләгән йылдар буйы республикабыҙҙың төрлө тарафтарына моң артынан сәфәр сығыуҙарым юҡҡа булмаған.



*Шәмсиә Нагаева*

Эҙләп табып, яҙып алып ҡайтып, фонотекабыҙға өҫтәп торған йыр-моңдарыбыҙҙы радио тыңлаусылар көтөп ала. Эйе, Ришат Вәхитов, Фатима Кәримова, Рәйсә Ҡулова, Булат Йәнекәев, Алик Николаев, Әбүзәр Мөхәмәтйәнов, Ғәзим Ильясов һәм тағы ла әллә күпме халыҡ таланттарының илаһи моңона һоҡланмау мөмкин түгел.

Эфир — эфир инде. Йырлағаның яңғырай ҙа, күңелдә яңы уйҙар, хистәр уятып, күккә аша. Шуға күрә, әле бына форсаты сыҡҡанда, журнал биттәре аша «Илһам» программаһы һәм башҡа тапшырыуҙарымдың тыңлаусыларын эйәртеп, сәфәргә юлланмаҡсымын.

Әлегә «Илһам» шәлкеменең бер героиняһына туҡталайыҡ. Ул Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Шәмсиә Нагаева булыр.

Наҙлы моң ағыла... Унда һағыш та, дәрт тә, шатлыҡ хистәре лә бөткөһөҙ. Һөйгән, һөйөлгәндәрҙең йөрәктәрен берсә ярһытып, берсә татлы хыялдарға һала ул.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 171 29.07.02, 17:41

Ана шулай, фәҡәт йыр юлында, сәхнәләрҙән сәхнәләргә йөрөп дан, шөһрәт ҡаҙанып өсөн генә тыуған гүзәл ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың береһе итеп күрә инем мин уны.

Башҡортостан радиоһы фонотекаһында уның ни бары тиҫтәгә яҡын яҙмаһы бар. Әммә шунһы хаҡ: йырсы тип таный икән, моңһөйәрҙәр һине магнит таҫмаға күп яҙылыуыңа ҡарап ҡына баһаламай. Улар өсөн һан, иҫәп түгел, сифат мөһим. Эйе, йыр яҙмышын, асылда, улар хәл итә.

Республикабыҙҙың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов, әле йырсы сәхнәлә тәүге аҙымдарын яһағанда, уның моңонан әсирләнеп түбәндәге юлдарҙы ерле юҡҡа ғына яҙмағандыр:

Иҫ киткес һеҙ, тыуған моңдар,
Иҫ киткес тә һеҙ, йырҙар!
Йыр-моң юкта
Ай-йондоҙҙар
Ҡайҙан еткерһен нурҙар!
Ярай әле йырҙар тыуған
Был донъяла йәм биреп,
Дәртһеҙҙәрҙе — дәртләндереп,
Ғәмһеҙҙәргә ғәм биреп...
Бәрхәт моңло, ебәк телле
Халҡыбыҙ бай йырсыға.
Алдыбыҙға көндәй балҡып,
Инде бер йырсы сыға.
Ҡарағаттай — ҡара күҙҙәр,
Ирендәр — бешкән сейә...
Ҡалған яғын йыры һөйләр,
Йырла әйҙә, Шәмсиә!

Был шиғырға сәбәпсе булған көндәрен Шәмсиә шулай хәтерләй:

— Мин ул ваҡытта, Бохара музыка училищеһын тамамлап, Өфөгә ҡайтҡайным. Шул дәүерҙә Рәми Ғарипов, Әнғәм Атнабаев, Миәссәр Басыров, Рафаэль Сафин кеүек талантлы йәш шағирҙар менән бергәләп халыҡ менән төрлө осрашыуҙар үткәреү, халыҡ араһына сығыу йолаһы була торғайны. Беҙҙе шул хәтлем йылы ҡаршылайҙар, сәскәләргә күмәләр ине.

— Йырҙарың, моңдарыңдың сығанағы ниҙә? — тип һораным мин унан. Шәмсиә — әңгәмәгә әүәҫ кеше. Был юлы ла шулай булды. Әхирәтем үҙенең балалыҡ йылдарын, үҫмер саҡтарын иҫкә төшөрҙө.

— 40-сы йылдарҙағыларҙың бала сағы ике һыу тамсыһылай бер-береһенә оҡшаш инде ул. Ҡот осҡос замандың зәһәрле елдәре беҙҙең ғаиләне лә ситләп үтмәне. Мин бер генә мәртәбә лә «Атай», тип әйтә алманым. Атай наҙы, атай хәстәре күрмәй үҫтем. Әсәйем дә йыш ҡына: «Ике аяғымды ат итеп, ике ҡулымды ҡамсы итеп, ал-ял белмәй, наҙ күрмәй йәшәнем», — ти торғайны.

Йөрәгендәге һағышын да, әрнеүен дә йыр аша таратып, йырҙан йәшәү йәме, күңеленә йылылыҡ таба белгәндер инде. Бәләкәй саҡтан уҡ әсәйемдең матур итеп «Ашҡаҙар», «Таштуғай», «Буранбай»ҙы йырлағаны йөрәгемә һеңеп ҡалған.

Беҙҙе, балаларын, ас-яланғас итмәйем тип ҡара таңдан кискә ҡәҙәр эшләгән әсәйемдең тормошон нисек кенә булһа ла еңеләйтәйем тип, ун алты йәшем тулыр-тулмаҫтан Ишембай ойоҡ-ойоҡбаш фабрикаһында эшләй башланым. Төнгө сменала йоҡо килмәһен өсөн яңғыратып йырлап ебәрәм. Ауыр заманда ла йыр-моңға иғтибарлы кешеләр аҙ булманы. Оҙаҡламай мине концерттарҙа ҡатнашырға саҡыра башланылар, «Һиңә мотлаҡ уҡырға кәрәк», — тиеүселәр ҙә аҙ булманы.

Бер көндө әсәйемә: «Мине йырсы булырға уҡырға барырға димләйҙәр бит әле», — тинем. Ул: «Йырға уҡыйҙармы ни? Был турала уйлама ла, ауыҙыңды ла асма!» — тип ҡырт киҫте. Көндө төнгә ялғап, гел ауыр эшкә күнеккән әсәйем йырсы профессияһын еңел-елпе кәсеп кенә тип аңлағандыр, күрәһең. Уҡыу тураһында ҡабат һүҙ ҡуҙғатыуҙың мәғәнәһеҙ икәнен аңлай инем, ныҡышманым.

Шулай ҙа хәйләһен таптым. Әсәйемдең бер туған апаһы Үзбәкстанда йәшәй ине. Башҡа тәүәккәл бер уй килде: шунда ҡунаҡҡа ғына барып ҡайтайым әле! Инәйемдәр йәшәгән Бохара ҡалаһында музыка училищеһы барлығын белеп, бәхетемде һынап ҡарамаҡсы булдым. «Минең йөрәгемә яҡын йырҙарҙы улар аңламаҫ, нисек ҡабул итерҙәр икән?» — тип уйлап торҙом да, ни булһа ла булыр, тип әсәйемдән отоп алған, атайым яратып

йырлаған «Ерән ҡашҡа»ны йырлап ебәрҙем. Имтихан ҡабул итеүселәр миңә йылмайып ҡарай башлағас, эсемә йылы инде. Мине уҡырға алдылар.

Уҡытыусыларымдан уңдым. Мин ғөмүмән бәхетле кеше. Ошоғаса миңә гел яҡшы кешеләр тап булып торҙо. Ишембайҙа тәүге уҡытыусым Башҡортостандың атҡаҙанған артисткаһы Сәрүәр апай Сайранова булды. Бохарала йыр буйынса Григорий Игнатьевич Козаков класында белем алдым. Ул оҙаҡ йылдар буйы Ленинградтың опера театрында йырлаған, уның ғүмер юлдашы Раиса Львовна Казимирская концертмейстерым булды. Улар миңә йыр нескәлектәрен генә түгел, тормош серҙәрен дә өйрәтте. Уларға мәңге рәхмәтлемен.

Шәмсиәгә Башҡорт дәүләт филармония сәхнәһендә оҙаҡ йырларға тура килмәй. Беренсе сәбәбе: ғүмер юлдашы Рәшитте осратыу. Тыуған ҡалаһы Ишембайҙа эшләгән, коллективында үҙен тик яҡшы яҡтан танытып өлгөргән инженер һөйгәненең теләген йыҡмаҫ өсөн Өфөгә күсеп килгәйне. Әммә оло ҡалаға ерегә алманы ул. Ул арала тәүге ҡыҙҙары Лилиә донъяға килде. Һәр яҡлап кәңәшләшкәндән һуң тыуған яҡтарына ҡайтырға ҡарар иттеләр. Шәмсиә Миҙхәт ҡыҙы был ваҡытта Өфө музыка педагогия училищеһында уҡытыусы булараҡ үҙен танытып өлгөргәйне инде. Ни хәл итмәк кәрәк: тормоштоң үҙ ҡануңдары, үҙ юлдары. Әммә яҙмыш ҡайҙа ғына ташламаһын, талант һинең менән ҡала.

Уның ҡарауы Ишембай бынамын тигән профессиональ йырсылы булды: бер генә концерт та, тантана ла Шәмсиәнән башҡа үтмәне. Йырсыны яраттылар, алҡыш һәм сәскәләргә күмелеп йәшәне.

Икенсенән, мәҙәниәт һарайында етәксе булараҡ, Шәмсиә Нагаева ҡала йәштәрен төрлө ижади түңәрәктәргә ылыҡтырҙы, йәш йырсыларға вокал серҙәрен өйрәтте.

Артабан уны «Теремок» тип йөрөтөлгән музыка мәктәбенә директор итеп тәғәйенләнеләр. Унда килеү менән йәш директор «Теремок»ты сәнғәт һарайы итеү хыялы менән яна башланы.

Шул ниәтен ғәмәлгә ашырыу маҡсатында Ишембай, Өфө, Мәскәү юлдарын тапай торғас, теләгенә ирешә: Ишембайҙа бынамын тигән өс ҡатлы сәнғәт йорто ҡалҡып сыҡты. Бына нисәмә йылдар инде бында йәш таланттар белем ала.

— Маҡсаттар күп инде. Хыялһыҙ йәшәһәң, тормоштоң йәме бөтә. Әле Салауат ҡалаһының музыкаль училищеһында алып барған эшем бик тә ҡыҙыҡлы. Башҡорт фольклоры бүлегендә эш етерлек. Иң мөһиме, йәштәр атай-олатайҙары тамырынан айырылмаһан. Беҙҙең бурыс ошо бәйләнеште боронғо йыр-моңдар, йолалар аша төшөндөрөү. Ауылдарҙан килгән ҡыҙҙар, егеттәр тырышып уҡып, белем алып тыуған яҡтарына ҡайтып, ошо изге эште дауам итһендәр ине, тим.

Үҙемдең концерт репертуарымды ла яңыртып торам. Әйтерһең дә әллә ниндәй сәхнәләр көтә мине, — ти Шәмсиә кинәйәле йылмайып.

Уйҙарым тағы тиҫтә йылдарға кире ҡайтып, уның йылдың ҡарбуранлы, һалҡын ямғырлы мәлдәренә ҡарамай, радиоға йыр яҙҙырам тип Ишембай менән Өфө араһын үткән саҡырымдарын самалай.

Шөкөр, йырсының бөртөкләп йыйылған был яҙмалары бәхетле яҙмышлы булды.

Йырсы Шәмсиә! Йырҙарыңды тыңлаусыларҙы, тамашасыларыңды йырың-моңоң менән тағы һәм тағы һөйөндөрөргә яҙһын.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 173 29.07.02, 17:41